*Диана МӘМЛИЕВА*

*Светлана Георгиевна Шаһиәхмәтова — күренекле башкорт композиторы, илебеҙ музыка мәҙәниәтенең алтын фондына ингән бик күп камерный инструменталь ансамблдәр, вокал, хор һәм төрлө инструменттар өсөн әҫәрҙәр авторы. Уның әҫәрҙәре Рәсәйҙең төрлө калаларында — Мәскәү, Казан, Ялтала уҙған күп һанлы мәҙәни форумдарҙа, бөтә Рәсәй һәм республика фестивалдәрендә, конкурстарҙа, концерттарҙа, Рәсәй композиторҙарының пленумдарында, съездарында танылған музыканттар етәкселегендә яңғыраны.*



*Светлана Шаһиәхмәтова 1939 йылда Өфөлә тыуған. Музыкаль белемен тәүҙә Өфө сәнғәт училищеһында ала, артабан Казан консерваторияһының композиторҙар бүлегендә профессор А.С.Леман класында укый. С.Г.Шаһиәхмәтова — 1964 йылдан Рәсәй Композиторҙар союзы ағзаһы. Әлеге вакытта ул Өфө сәнғәт училищеһында укыта, композиторлык эшмәкәрлеге менән әүҙем шөғөлләнә. С.Г.Шаһиәхмәтованың ижади шәхес буларак үҫеше, композиторлык таланты башкорт милли музыкаһы менән тығыҙ бәйләнгән, сөнки композитор шунан илһам ала.*

С.Г. Шаһиәхмәтованың әҫәрҙәрендә хәҙерге заман башҡорт композиторҙары тарафынан фольклор мотивтарын үҙенсәлекле ҡулланыу сифаттары айырыуса асыҡ сағыла. Быны иҫбатлау өсөн композиторҙың ҡайһы бер әҫәрҙәренә иғтибар итеү ҙә етә.

Ҙур симфоник оркестр өсөн яҙылған «Башҡорт сюитаһы»нда «Бейеш», «Аҡрын бейеү көйө», «Карауанһарай», «Айыу-майор»; фортепиано өсөн пьесаларында «Ете ҡыҙ», «Ҡарамышев», «Ҡоҙа» көйҙәре; аккордеон йәки баян өсөн эшкәртелгән «Шәл бәйләнем», «Алты егет», «Бөйрәкәй», «Ете ҡыҙ»; хор өсөн эшкәртелгән «Гөлнәзирә», «Ҡара юрға», «Еҙнәкәй» пьесалары фольклор материалының күп төрлөлөгөн, бар байлығын оҫта ҡулланыуға нигеҙләнгән.

Композиторҙың тәүге әҫәрҙәренең береһе булған, ҙур симфоник оркестр өсөн яҙылған «Башҡорт сюитаһы» 1964 йылда ижад ителгән. Әҫәрҙең атамаһы уҡ әйтеп торғанса, композитор бында иң элек милли көйҙәрҙе күҙ уңында тотҡан. «Бейеш» йыры сюитаның беренсе өлөшөнөң төп темаһы



09-2001.p65 171 29.08.01, 13:15
Black

булып тора. С.Г.Шаһиәхмәтова яҙған көйҙө ошо йырҙың төрлө варианттарын йыйыусы А.Ключарев һәм Р.Сәлмәновтарҙың көйҙәре менән сағыштырғанда бер-береһенә оҡшаш булыуы асыҡлана.

Бейеш Ишкинин — XIX быуатта йәшәгән, Баймаҡ төбәгенән сыҡҡан милли башҡорт батыры. Байҙа хеҙмәтсе булып йөрөгәндә, ауыр эшкә түҙә алмайынса, Бейеш ҡасып китә. Урмантауҙарҙа ҡасып йөрөп, батша чиновниктарының йорттарына һөжүм итә, әммә талап алған әйберҙәрен үҙенә ҡалдырмай, ярлыларға таратып бирә. Бейеш ҡурайҙа оҫта уйнаған, матур йырлаған, үҙе лә йырҙар ижад иткән. Түбәндәге йыр шуларҙың береһе:

Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем, —
Тышҡынаһын ниҙән тышлайым?
Йәйгенәһен бында йәйләгәйнем,
Ҡышҡынаһын ҡайҙа ҡышлайым?

Халыҡ ярлыларҙы яҡлаған Бейеште үҙ иткән, уның социаль ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы көрәшеүен яҡшы аңлаған.

Светлана Шаһиәхмәтова эшкәртеүендәге сюитаның тәүге өлөшөнә башҡорт халҡының ошо ятраҡан йыры индерелеүе символик мәғәнәгә эйә, ул әҫәрҙең башҡа, артабанғы өлөштәренә инеш булып тора.

Үҙенсәлекле тембр һәм оркестр башҡарыуында көй иғтибарҙы айырыуса йәлеп итә. Композитор профессиональ һәм халыҡ көйөнөң органик берләшеү өлгөһөн ижад итеүгә өлгәшкән.

Сюитаның икенсе өлөшө «Бейеү көйө» тип атала һәм уның нигеҙен ҡурай башҡарыуындағы «Бейеү көйө» тәшкил итә. Теманың интонацион ҡоролошо халыҡ бейеү көйөнөң милли үҙенсәлеген кәүҙәләндерә. Сюитаның икенсе өлөшөнә лә темперамент, етеҙлек, ритмлылыҡ хас.

Сюитаның өсөнсө өлөшөн асыусы «Ҡобайыр» авторҙың ҡатмарлы фольклорҙы үҙенсәлекле ҡулланыуының сағыу өлгөһө булып тора. Был тыныс һәм талғын көй композиторҙың уйтелэгенә тап килә: дәртле «Бейеү көйө»нән һуң талғын көй ағыла.

С.Г.Шаһиәхмәтова үҙенең көйҙәрендә фольклор интонацияларын уңышлы файҙалана: көйҙөң төрлө форма алыуы, вариант үҫеше принцибында өҙлөкһөҙ яңғырауы, үҙенсәлекле метроритмик ойоштороу шуға булышлыҡ итә. Һөҙөмтәлә көйҙөң импровизацион ҡоролошо оҙон көй рәүешен ала. Күпселек осраҡта һамаҡлап башҡарылған оҙон көйҙәр ҡобайыр ҡоролошона тап килә.

«Ҡобайыр»ҙың урта өлөшө «Караһанһарай» халыҡ йырына нигеҙләнгән. Был йырҙың үҙенсәлеге шунда: уның инструменталь һәм вокаль варианттары бар. Композитор уларҙың вокаль вариантын файҙаланған һәм унда йырҙың һүҙҙәре һәм көйөнөң тығыҙ бәйләнеше күҙәтелә.

Сюитаның дүртенсе өлөшөндә иһә «Айыу-майор» көйө файҙаланылған. Был көйҙө композитор Заһир Исмәғилев яҙып алған.

Ғөмүмән, Светлана Шаһиәхмәтова үҙ ижадында фольклорҙы яңыса файҙаланырға ынтыла. Шуға күрә фольклор менән автор темаһы араһында айырма һиҙелмәй тиерлек.

Көйҙәрҙең милли сығанаҡтары авторҙың фортепиано ижадында ла сағыла. Фольклор файҙаланылған әҫәрҙәргә иң элек «Фортепиано өсөн 20 балалар пьесаһы» тигән популяр йыйынтыҡты күрһәтергә мөмкин. Был йыйынтыҡтағы биш пьесала «Ете ҡыҙ», «Ҡарамышев», «Димлә ҡыҙҙың сибәрен», «Һимеҙ ҡыҙ» кеүек башҡорт көйҙәре һынлана.

Композитор С.Г.Шаһиәхмәтованың ижад фондында башҡорт халыҡ көйҙәрен эшкәртеү өлгөләре лайыҡлы урын алып тора. Улар араһынан «Баян өсөн 18 башҡорт халыҡ йыры» йыйынтығын, хор һәм фортепиано өсөн «Гөлнәзирә», «Түңәрәк күл», «Ҡара юрға» һ.б. әҫәрҙәрҙе, валторна, скрипка, кларнет, виолончель өсөн пьесаларҙы атап үтергә мөмкин.

«Башҡортостандың халыҡ музыкаһы» серияһына төрлө характер һәм төрлө йөкмәтеле 18 халыҡ йыры һәм бейеү көйө ингән. Был йыйынтыҡ аккордеон һәм баянда халыҡ көйҙәрен башҡарыусылыр араһында айырыуса популяр һанала. Композиторҙың халыҡ көйҙәрен эшкәртеүгә һаҡсыл мөнәсәбәте, милли колоритты һаҡлауы, төп һәм ярҙамсы тауыштарҙы аныҡ билдәләүе иғтибарҙы йәлеп итә. С.Г.Шаһиәхмәтова ижадында башҡорт йырҙарының үҙенсәлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Шулай итеп, композитор Светлана Шаһиәхмәтова ижадында халыҡ сәнғәтенә таянып эшләү, унан илһам алыу асыҡ күренә, профессиональ ижадының һөҙөмтәле үҫеше халыҡ ижадына нигеҙләнә.



09-2001.p65 172 29.08.01, 13:15
Black